Ҡулдарҙы кутәрҙек.

Ҡулдарҙы кутәрҙек,

Аҫҡа төшөрҙек,

Ә хәҙер йәйҙек,

Ҡайсы эшләнек.

***

Ударница, комсомолка,

Һәр эштә алға бара.

Ҡушымтаны йырлағанда ишһеҙ уйнаусы торғандарҙың береһен алып ике саф араһынан бейеп үтә артҡа барып баҫа. Ишһеҙ ҡалған уйнаусы сафтарҙың алдына барып тора. Яңынан наза көйө башлана.

***

**Күҙ бәйләш.**

Бер баланың күҙен бәйләп,

Һүҙҙәр әйтәләр:

Ары лап-лап, бире лап-лап,

Кейеҙ ҡаплап, һөңгө һаплап.

Бына тора һыйыр кеүек, әммә тора мышнап! – тигән һүҙҙән һуң күҙе бәйләнгән бала эҙләй башлай.

***

**Ҡара тәкә.**

Уйында алты унлап кеше ҡатнаша ала. Резина туп алына. Көтөүсе тупты алға типкеләп, янында йөрөгән иптәштәренең аяғына тейҙерергә тырыша. Туп береһенең аяғына барып тейһә, тупты ул йөрөтә башлай, ә башҡалар туп тейеүҙән һаҡланып, уның эргәһендә һикергәләшеп йөрөйҙәр. Әгәр тупты көтөүсе яҙа типһә, балалар : «тап ҡара тәкәне» - тип уны йеңелсә һуҡҡылап алалар.

***

**Әбәкле.**

Балалар түңәрәккә торалар,
Уйынды алып барыусы әйтә:
Һайыҫкандай шиҡаҡлап
Мин йөрөйөм ил һаҡлап
Ҡаҙҙай булып ҡыйғаҡлап
Һиңә тейәм, һин-әбәк! – шул әйткән
һүҙҙәрҙән һуң балаларҙы тота башлай.

***

**Кәзә бәрәстәре менән бүре.**

Беҙ үлән ашайбыҙ
Бүренән ҡурҡмайбыҙ.
Урманда, аҡланда
Күңелле уйнайбыҙ.
Волк сидит в стороне на стуле.
Козочки пасутся на лугу,
пацапывают травку и напевают,
пляшут под музыку, выбегает
волк и ловит козлят.

***

**Игра «Балыҡ кеүек»**

Балыҡ кеүек йөҙәйек,
Ҡоштар кеүек осайыҡ.
Ҡуян кеүек һикерәйек,
Урыныбыҙға ултырайыҡ.

***

**Себештәр.**

Себештәр сип-сип- тиҙәр
Асыҡтыҡ бик-бик- тиҙәр

Әллә мине беләләр
Артымдан йүгерәләр.
Туҡтауһыҙ сип-сип- тиҙәр
Беҙгә ем һип-һип- тиҙәр.

***

**Баҫтырышмаҡ.**

Һанашмаҡ әйтеп бер бесәй һайлана,
Балалар һүҙҙәр әйтеп бесәйҙән ҡасалар.
Мыяу-мыяу мырлаған
Мейестә ул йырлаған
Бөгөн сысҡан тотмаған
Тотор ине- йоҡлаған.
Мыяу-мыяу йырламаҫ
Кис булғас, ул йырламаҫ
Тында алмаҫ һуламаҫ
Мине һис кем тоталмаҫ.

***

**Ҡапҡа сығышлы.**

Уйнаусылар ҡулдарыман тотоноп,
ике рәт булып баҫалар, алмаш бер
береһенә һорауҙар бирәләр.
Ерҙә, күктә ниҙәр бар? Күк күгәрсен ҡоштар бар.
Һандығыңда ниҙәр бар? Йофар менән шәкәр бар.
Йофарыңды бир миңә,ниңә бирәйем һиңә?
Ҡайҙа миңә хан юлы, ана һиңә хан юлы.
Уртаһында йылға бар, аяғың булһа атлап сығ!
Һорауҙарҙан һуң бер бала йүгереп ҡулдарын
ысҡындырырға тырыша.

***

**Наза.**

Йәштәр икешәрләп, ҡулға кул тотоношоп,
бер-бер артлы теҙелешә. Иң алда ишһеҙ
егет йәки ҡыҙ тора. Барыһыла баҫҡан ергә
аяҡтарын ҡулдарын хәрәкәтләндереп,
Наза көйөнә йырлайҙар:
Наза тигән ҡыҙ баланың
Етеҙ икән ҡулдары.
Көндә наза эшләгәнгә
Матур тормош юлдары.
Наза, наза,
Наза матур ҡыҙ бала.

***

**Еләк.**

Беҙ барҙыҡ, барҙыҡ, барҙыҡ
Ер еләктәре таптыҡ.
Бер, ике, өс, дүрт еләк
Ҡып-ҡыҙылы тәмлерәк.

***

**Гөрөлдәк.**

Уйында биш бала ҡатнаша.
Дүрт бала дүрт мөйөшөнә баҫа, көтөүсе
уртала тора. Күҙен йомоп урынында өйөрөлә:
ГӨР-ГӨР ГӨРӨЛДӘК ДҮРТЕБЕҘГӘ БЕР КҮЛДӘК!
Көтөүсе әйләнгән арала уйнаусылар бер береһе
менән урындарын алмаштыралар. Шул ваҡытта
көтөүсе бер мөйөштө алып ҡалырға тырыша.

***

**Айыукай.**

Айыуҡай, айыуҡай
Һин ниңә шулай бик яй.
Алан тулпан баҫаһың
Ҡышын йоҡлап ятаһың.
Һин бит ҙур, шундай көслө
Беҙгә уйнарға килсе.

***

**Ҡуян менән бүре.**

Ап аҡ ҡуян урманда, ҡырпаҡ ҡарҙа ултыра.

Ҡолаҡтарын ҡайсылап, ҡыбырҙатып ултыра.

Бына шулай, бына шулай урман тауышын тыңлай.

Оҙаҡ ултыра алмай, ҡулҡайҙары өшөгәс,

Сәпәк сәпәкәй итә, ҡулҡайҙары өшөгәс.

Бына шулай сәп сәп, беҙҙең ҡуян шәп шәп.

Бүре килә лап лап, бүре килә атлап.

Был ҡуянды тотайым, тиҙрәк ҡабып ашайым.

***

**Әбәк- көбәк.**

Уйнаусылар араһынан көтөүсе һайлана.

Балалар бер-бер арты теҙелешеп тора.

Көтөүсе алда торған баланың усына һуғып:

Әбәк-көбәк, алтын табаҡ.

Етә алһаң, көмөш ҡалаҡ.

Етә алмаһаң, артыңа

Етмеш көрәк көл! – ти ҙә йүгереп ҡаса,

Ә тегеһе уны баҫтыра. Көтөүсе, ҡасып барып

теҙелгән төркөмдең артына баҫа алһа,

баҫтырған бала көтөүсе була.Ә инде ҡаса алмай

баҫтырған балаға тотолһа,

яңынан үҙе көтөүсе була.

***

**Бүреле.**

- Дуҫтар ҡайҙа барағыҙ?
- Ҡара урманға барабыҙ.
- Ҡара урманда нишләйһегеҙ?
- Ҡурай еләге йыябыҙ.
- Еләк менән нишләйһегеҙ?
- Еләктән ҡаҡ ҡоябыҙ.
- Бүре килһә, нишләйһегеҙ?
- Урман буйлап ҡасабыҙ.

Бүре килеп сығып балаларҙы тота башлай.

***

**Кикрикүк.**

Уйнаусылар ике рәт булып бер-бере
артлы баҫалар, ал бер бала була.
Ул: «аҡтыр, күктер бөтәгеҙҙә йүгеректер,
кикрикүк»- тип ҡысҡыра. Был һүҙҙәрҙән
һуң, иң арттағы икеһе ике яҡтан алға йүгерә,
ә кикрикүк тигән бала уларҙың
береһен тоторға тырыша.

***

**Кем тиҙерәк?**

Уйындың аңлатмаһы. Көтөүсе түңәрәкте
уратып йөрөп үҙенә урын эҙләй.
Оҡшаған урынды тапҡас, ул урындың
хужаһына еңелсә һуғып, юлын түңәрәк
буйлап дауам итә. Урын хужаһы уға ҡаршы
килә, осрашҡас күрешәләр һәм һәр кем үҙе
түңәрәк буйлап буш урынға йүгерә.
Алда барып еткән хужа була.

***

**Күбәләк.**

Әйт әле күбәләк, һөйләшәйек бергәләп
Был тиклем күп осоп, арымайһың һин нисек?
Нисек һуң тормошоң, нисек көн күрешең?
Һөйләп бирсе теҙеп, таба алаһыңмы нисек?
Уйында ҡатнашыусылар һанашмаҡ әйтеп, бер көтөүсе
һайлана. Көтөүсе һүҙҙәрен әйткәнсе, башҡалары
йәшенәләр. Көтөүсе уларҙы эҙләй.

***

**Аҡ ҡалас.**

Булаттың тыуған көнөндә
Беҙ бешерҙек аҡ ҡалас
Бына шундай ул бейектә,
Бына шундай тәпәштә,
Бына шундай киңлектә,

Бына шундай тарлыкта.

Аҡ ҡалас, аҡ ҡалас,

Һөйгәнеңде алып ҡас.

***

**Турғайҙар.**

Турғайҙар асыҡҡандар

Өйгә осоп килгәндәр

Ем ем ем ашағандар

Ем ашап туйғандар.

Рәхмәт! Туйҙыҡ

Яңынан осоп киттек.

***

**Буратино.**

Буратино кирелде,

Бер ике, эйелде.

Ҡулдарын ситкә йәйҙе,

Алтын асҡысын тапты.

Алтын асҡысын алыр өсөн,

Аяҡ осона баҫты.

***

**Дауыл.**

Балалар ҡапма-ҡаршы ике эскәмйәлә
тигеҙ бүленеп ултыралар. Уйында алып
барыусы әйтә, балалар эшләй:
«йәшен» - сәпәкәй сабалар,
«ямғыр» - тубыҡҡа ҡул менән һуғалар,
«күк күкрәй» - аяҡ төбөрләтәләр,
«дауыл» - йүгерәләр.
Үҙ урындарына алда килеп ултырған
Төркөм еңеүсе була.

***

**Йәшерәм яулыҡ.**

Уйында ҡатнашыусылар һанашмаҡ әйтеп,
бер көтөүсе һайлана. Башҡалары түңәрәккә

баҫа, көтөүсе һиҙҙермәйсә яулыҡты һалып китә.

Йәшерәм яулыҡ, йәшерәм яулыҡ

Йәшен ҡайын аҫтында

Һиҙҙермәйсә ташлап китәм

Бер иптәшең аҫтына.

***

**Ҡуяндар менән бүре.**

Беҙ шат ҡуян балалары,

Һис уйнап туймайбыҙ

Бүре тоторға теләһә

Һис ҡурҡып тормайбыҙ! – тигәндән

һуң бүре ҡуяндарҙы тота башлай.

***

**Аҡ тирәк, күк тирәк!**

Аҡ тирәк, күк тирәк!

Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?

Ҡашығаяҡ йыуа белмәгән,

Сәсен тарай белмәгән,

Иҙән йыуа белмәгән

Айһылыу тигән ҡыҙ кәрәк.